# Йәш хәбәрсе

"Мәңге йәшә, эй, һөйөклө башҡорт теле,

Атам теле, әсәм теле – минең телем".

З.Биишева.



Октябрь № 10, 2019 йыл
Талбазы ауылы Лицейы
муниципаль бюджет дөйөм белем
учреждениеһы

## 11 октябрь – Башҡортостан Республикаһың тыуған көнө



Башҡортостаным Урал тауҙарының итәгендә урынлашҡан. Башҡортостандың күп йылғалары Урал тауҙарынан башлана. Ана шул тауҙарҙан ҡабаланып-ҡабаланып һылыу Ағиҙелкәй ағып төшә һәм, Башҡортостанды ҡап урталай киҫеп, Камаға барып ҡоя. Был йылғаны бейектән ҡараһаң, бар донъянды оноторһоң: сылтырап аҡҡан көмөш һыуы, ярҙары текә, тирә-яғында уры һаҡлап торған меңйәшәр ҡарағайҙар урмандарында иһә – ниндәй генә йәнлектәр, емеш-еләктәр юҡ!

Һәм минең Башҡортостаным Урал тауҙарынан сығарылған файҙалы ҡаҙылмалары менән дан тота. Нефть, күмер, баҡыр, марганец, хром, көмөш рудалары һәм башҡалар...

Башҡортостандың бер бәләкәй генә киҫәгендә минең тыуған ауылым – Талбазы урынлашҡан.

Талбазы  ауылы – Ауырғазы районының үҙәге һанала. Уны төрлө икһеҙ- сикһеҙ яландар, ҡуйы урмандар, мөһабәт тауҙар уратып алған. Мин ауылымдың матурлығына, төҙөклөгөнә һоҡланып бөтә алмайым. Әленән – әле яңы өйҙәр үҫеп сыға. Эйе, беҙҙә эшһөйәр, уңған, сабыр кешеләр йәшәй. Районыбыҙ гүзәл тәбиғәте менән генә түгел, арҙаҡлы кешеләре менән дә данлыҡлы. Башҡортостандың беренсе осоусыһы Ғәли Ишмурзин, ғалимә Фәнүзә Нәзершина, композитор Бәхти Ғайсин, йырсылар - Зифа Нагаева, Иҙрис Ғәзиев, артистка Рәмзиә Ҡудашева, талантлы шағирәләр Әлфиә Әсәҙуллина, Флүзә Мырҙабаева, Вәрис Акбашев, йөрәктәрҙе тетрәндерерлек  яҙмышлы шағир  Рәшит Назаров.... Ошо билдәле шәхестәр тыуҙырған ерҙә йәшәгәнгә мин сикһеҙ ғорурмын.

Ибракова Азалия

## Беҙҙең юбилярҙар



### Башҡортостандың халыҡ шағиры Мостай Кәримдең тыуыуын 100 йыл

Илебеҙҙә киң танылған башҡорт әҙәбиәтенең күренекле вәкиле, һоҡландырғыс һүҙ оҫталарының береһе булып – Мостай Кәрим тора. Мостай Кәрим – республикабыҙҙа ғына түгел, төрлө ерҙәрҙә, төрлө халыҡтарҙа ла оло абруй, ҙур ихтирам яулаған халыҡ шағиры.

Әйптең ижады оҙайлы һәм емешле булды. 1935 йылдарҙан алып ул 70 йылдан ашыу ижад итте. Әҙип төрлө жанҙарҙа эшләне: шиғырҙар, пьесалар, хикәйә - повестар яҙҙы. Яҙыусы бик күп илдәрҙә булды, билдәле яҙыусылар менән осрашты. Һәр ерҙә Башҡортостанды данланы. Уны белмәгән кеше бик һирәктер. Яҙыусының әҫәрҙәре асыҡ йөҙлө, ололарға ла, кеселәргә лә ихтирамлы булырға, әҙәбиәтте, туған телде яратырға өйрәтте.

Шағирыбыҙға төрлө милләт ҡәләм оҫталары үҙҙәренең

береһенән береһе гүзәлерәк шиғырҙарын арнаған. Уға ҡарата әйтелгән юлдарҙы бергә туплаһаң, үҙе бер китап булыр ине.

Ваҡыт көслө ырыуҙарҙы, илдәрҙе үҙе менән алып китә. Әммә бөйөк шәхестәр, йылдар, быуаттар сылбыры аша үтеп ил улы, ил ҡыҙы булып күңелдәрҙә йәшәй бирәләр. Мостай Кәрим беҙҙең арала булмаһа ла уның китаптары, әҫәрҙәре, уның һәм даны ҡалды. Уның исеме мәңге халыҡ күңелендә йәшәр!





## Уҡыусылар ижады

**5 класс уҡыусылары башҡорт телен бик теләп өйрәнәләр. Улар араһында шиғырҙар, бәләкәй хикәйәләр ижад итеүсе ижади балалар күп. Кем белә, бәлки, киләсәктә буласаҡ хәбәрселәр, яҙыусылар үҫәләрҙер бында. Һеҙгә уларҙың эштәрен тәкдим итәбеҙ.**

## Йәмле йәй көндәре

Август айы минең өсөн шатлыҡлы осор булды.Красноусол республика балалар шифаханаһына барып ял итеү бәхете тейҙе.

21 көн эсендә үҙемә күп дуҫтар таптым,һаулығымды нығыттым,яңы ерҙәр күрҙем. Массаж,батҡаҡ менән дауаландым,минерал ванналар индем. Ваҡыттың нисек үткәне һиҙелмәй ҙә ҡалды. Көндөҙ дауаланһаҡ,кисен төрлө мауыҡтырғыс саралар үткәрелде. Бик күңелле булды.

Аюпов Артур

Беҙ йәйге каникул осоронда ғаиләбеҙ менән Төркиәгә барҙыҡ.Әсәйем,бәләкәй туғаным менән Алания ҡалаһында ял иттек.

Иртәнән кискә тиклем диңгеҙ буйында булдыҡ.Туғаным менән һыу төбөнән төрлө-төрлө таштар йыйҙыҡ,диңгеҙҙә йөҙҙөк.

Мәскәү ҡыҙы Оля менән төрлө экскурсияларға йөрөнөк.

... Йыл һайын мин мәктәп укыусылары өсөн ойошторолған лагерҙа ял итәм.Иң иҫтәлекле ваҡиға «Бантиктар көнө » булды...

Сидорова Эвелина

... Йәй көнөн көтөп алам.Ауылда йәшәгән олатай менән өләсәй янына ашҡынып ҡайтам.Олатайҙың һөйләгән экиәттәрен,өләсәйҙең тәмле ҡоймаҡтарын онотоп булмай.

Темирова Камилла

## Көҙгө урман

Балалар дәрестән һуң яҡындағы урманға сыҡты.Урман һуҡмағына ҡойолған һары япраҡтар өҫтөнән ҡыштыр-ҡыштыр итеп атлап үттеләр.

-Япраҡтар ниндәй тауыш сығара? Ниндәй һүҙгә оҡшаған?- тип һораны уҡытыусы.

Балалар япраҡтарҙы ҡыштырҙатып атлай бирә лә ҡолаҡтарына сағылған һүҙҙе әйтәләр,атлай бирәләр ҙә тыңлап ҡарайҙар.

-Быш-быш,-ти.

-Ҡыш-кыш,ти.

-Шыу-шыу,ти.

Иң үҙенсәлекле һүҙҙе Илдар әйтте.

-Япраҡтар хуш-хуш, ти.Улар йәй менән хушлаша,-тине. Бөтәһе лә уның менән ризалашты.

Заһитова Зарина

## Сәләмәт тәндә-сәләмәт рух

### Һау булайым тиһәң:



Дөрөҫ туҡлан, витамин аша.
Һәр иртә зарядка эшлә.
Физкультураны ярат.
Быуыныңды нығыт.
Насар ғәҙәттәреңде ташла.
Шәхси гигиенаны онотма.
Сыныҡтырға кәрәк.
Ял ит, етәрлек йоҡла.









Мөхәрририәт: башҡорт теле уҡытыусыһы
Булатова Г.М., 11 класс уҡыусылары